УДК 811.161.1

# МОСТАЙ КӘРИМДЕҢ “ЯРЛЫҠАУ” ӘҪӘРЕНДӘ “ОЛАТАЙ” КОНЦЕПТЫ

# CONCEPT "GRANDFATHER" IN THE LITERARY WORK "PARDON" OF MUSTAI KARIM

Р.Р. ЯНМУРЗИНА*
Г.М. САГИНБАЕВА**

**Резюме**

Данная статья посвящена к изучению концепта «Дедушка» в произведении «Помилование» башкирского народного поэта Мустая Карима. Автор в своем образе отражает крепкие и дружные родственные отношения, семейные ценности, душевное богатство башкирского, русского, украинского народов в годы ВОВ. Поэт на основании концепта «Дедушка» в произведении «Помилование» сумел отразить единство народов в образе Ефимия Лукича, ставшим популярным литературным памятником среди читателей в международном уровне.

**Ключевые слова:** концепт, нравственность, образ, менталитет, народ, язык, башкирское языкознание.

**Summary**

This article is devoted to research of concept "Grandfather" in the literary work "Pardon" of the Bashkir national poet Mustai Karim. The author reflects the strong and amicable relations, family values, sincere wealth of the Bashkir, Russian, Ukrainian people in the image in the years of the Second World War. The poet managed to reflect on the based of concept "Grandfather" in the literary work "Pardon" unity of the people in Efimiya Lucic's image, which become popular literary monument among readers in the international level.

**Keywords:** Bashkir linguistics, concept, morality, image, mentality, nation, language.

Халыҡтың йәшәү дәүерендә милли үҙ аңы, аҡылы, тарихы, әҙәбиәт тәжрибәһе байытылып, йыйылып, икенсе телдәрҙән үҙләштерелеп үҫешә барған. Донъяүи тел картиналары шуға ла халыҡ тың оло тәжрибәһенә бәйле, уның һөҙөмтәһендә телдең халыҡҡа бәйле

* кандидат филологических наук, Башкирский государственный университет. Уфа-Башкортостан.
Candidate of philology sciences, State University of Baskir, Ufa-Bashkortostan.
** Магистрант, Башкирский государственный университет, Уфа-Башкортостан.
The postgraduate of State University of Baskir, Ufa-Bashkortostan.

милли төшөнсәләре барлыкка килә. Тел ғилемендә уны “концепт” тип атайҙар. Һәр шағир - яҙыусының әҫәрҙәрендә концепттар йыйылмаһы бар. Төрлө телдәрҙә лә ул төрлөсә. Сөнки халыктың йәшәйеше бер-береһенә оҡшаш түгел, шунлыктан әҙәби әҫәрҙәрҙә, шиғырҙарҙа концепттар айырыла. Халыктың рухи һәм донъяға ҡарашы, йәшәйеше, асылы тарихҡа бәйле. Мәҙәни, милли, сәйәси, иктисади, фәлсәфәүи, дини идеялар халыктың үткәндәренә тамырланып нигеҙләнә. Был мөхиттә йәшәгән халык үҙенә генә хас булған шул рухи ҡиммәттәргә, нормаларға, ҡанундарға буйһоноп йәшәй. Шулай итеп, милли төшөнсәләр формалаша. Мәҙәниәтте, телде өйрәнеү ҙә халыктың милли аңына бәйле. Тел ғилемендә Э. Сепир, А. А. Потебня, Л.В. Щерба, Г. Г. Шпет, Л. В. Выготский, А. Н. Леонтьев, Н. И. Жинкин, А. А. Леонтьев, А. А. Залевская, Е. Ф. Тарасов, Ю. А. Сорокин, Н. В. Уфимцева кеүек ғалимдарҙың концепт буйынса яҙылған хеҙмәттәре һәр халыктың үҙенә генә хас донъяға ҡарашы барлығын билдәләй.

Тел халык мәҙәниәтенең мөһим компоненты булып тора, милли үҙаңды асыуҙа ла телдең роле бик ҙур. Һәр кеше билдәле бер йәмғиәттең вәкиле һанала, уның милли аңында тарихи компоненттар шул халыкка ғына хас төшөнсәләрҙе барлыкка килтерә. Шул төшөнсәләрҙең береһе – концепт – билдәле халыктың теле һәм мәҙәниәтен бәйләп өйрәнеүсе лингвоменталь берәмек. Концепт аша кешелә туған тел образы һәм уның концептосфераһы барлыкка килә. Лингвокультурологик концепцияға ярашлы, һүҙ тел берәмеге генә түгел, ә мәҙәниәт концепты буларак та ҡарала, улар аша тел шәхесе менталитеты өйрәнелә [4, 18-25].

“Олатай” концепты ла башҡорт халҡының якты образдарының береһе, “ғаилә” концептының нигеҙен тәшкил итә. Башҡорт халык шағиры Мостай Кәримдең “Ярлыкау” повесында “олатай” концепты Ефимий Лукич образы аша сағылыш тапҡан. Был әҫәрҙең миҫалдарында шул концептка бәйле лексемалар байтаҡ ҡулланылған. Мәҫәлән, олатайға бирелгән характеристика, командир һәм Мария Тереза, Зух образдары аша “олатай” концептын асып бирә. Миҫалдар:

*“Был алтмыштар өҫтөндәге ир – ҡалай-тимер сүкеүсе, мейес сығарыусы, Чернявкала ғына түгел, бөтә тирә-яҡта һыҡмырлығы, ҡатылығы менән дан тотҡан Ефимий Лукич Буренкин ине. Нәфсе тип,*

*ситтекенә теймәҫ, дөмөгөп китһә лә, үҙенекен бирмәҫ бер әҙәм Ефимий Лукич. Тиҫкәрлеге лә етерлек. Шул тиҫкәрлеге арҡаһында ул немецтар алдында ла ҡойолоп төшмәне, үҙебеҙҙекеләр әйләнеп килгәс тә, улар тирәһендә киске шәүлә төҫлө нәҙек оҙон кәүҙәһен бөгөлдөрөп-һығылдырып өлтөрәп йөрөмәне"* [1, 71], *Ҡарсығы дүрт йыл әүәл үк гүр эйәһе булғайны* [1, 71].

Ефимий Лукичтың ҡатыны вафат була, уның ҡулында ике бәләкәй бала ҡала. Ул ғүмерендә күпте күргән олатай, шуға ла был тормошта уның күңеле күп ҡайғыларҙан ҡатҡан, һуғыш ваҡытында балалар өсөн генә ҡайғырып йәшәүе менән борсолған образ. Ул "ҡараусы", "ашатыусы", "тәрбиәләүсе әсә" ролен башҡара. "Ярлыҡау" әҫәренең сюжеты ла шул образдан ҡатмарлы һынылыштар ала, ваҡиғалар ҡуйырыуына сәбәпсе була. Зух танк менән яңылыш ҡына утарға төкөп, бабайҙың кәзәһе йәрәхәтләнә, шул аркала балалар һәм Лукич бабайҙың берҙән-бер өмөтө, ризыҡ сығанағына мәхрүм ҡала. Шул ваҡытта уның психологик һыҙатланыштары асыла башлай: "*Ҡәһәр алғыры!" – тим кемделер ҡарғап ҡуйҙы Ефимий Лукич"* [1, 71], *"Кешеләргә нисбәтен ҡатыраҡ бәғерле булһа ла, Ефимий Лукич мал йәнле ине. Әле борон заманда ат бейеүсе Лука карт, ун ете йәшлек кинйә улын үҙ һөйәре менән әүрәтмәксе булып, уны кәсепкә алып сыкты"* [1, 72], *"Балаларҙы өйгә индереп, ҡаты-ҡото менән тамаҡтарын туйҙырҙы. Һаҡал-мыйығын төҙәтеп алды. Унан, һандыҡтан сығарып, кешелеккә кейә торған ҡыйыҡ яғалы зәңгәр ҡулдәген, ап-арыу ғына көрән костюмын, текә козыреклы ҡара картузын кейҙе"* [1, 74].

Балалар олатаһын нык яраталар, уның әйткәндәрен тыңлап ҡына торалар. Етем ике сабый өсөн Лукич берҙән-бер ғәзиз кеше, уларҙы ихлас яратыусы берҙән-бер ғаилә ағзаһы: *Олатай! Беҙ торҙоҡ! – тип тәүҙә ҡулдәксән, ялан аяҡ Маринка, һауытын тотоп, өйҙән йүгереп сыҡты. Аккойрок янына еткәс, ҡыҙ аптырап ҡалды* [1, 74], *"Балаларҙың иң ҡурҡҡан нәмәһе – яңғыҙ ҡалыу ине. Тәүҙә уларҙы аталары ташлап китте, уҙған көҙҙө әсәләре, гүр эйәһе булып, үкһеҙ ҡалдылар. Хәҙер бынығы ла юлға йыйына. Өләсәләрен улар инде онотоп та өлгөргәйне"* [1, 75], *"Әммә был юлы ул: "Бармайһығыҙ!" –*

*тип ҡырт киҫмәне, йомшаҡ ҡына, сабыр ғына аңлатып бирҙе”* [1, 75].

Яза күргән Лукич образын “ғәҙел”, “зирәк”, “үҙ һүҙле”, “маҡсатлы” лексемалары менән ҡарарға була. Ул кәзә хаҡын ҡайтарыр өсөн фронтҡа йүнәлә. Тәүге аҙымында уны ҡаты бәғерле тип тә, шулай уҡ уның хәлен аңлап та була, тигән һығымтаға килергә була. Мария Тереза һәм Зух араһындағы мөхәббәт һәм Лукичтың кәзәһеҙ ҡалыуы ла осраҡлы күренеш. Бында ике ситуацияға айырым характеристика бирергә була. Тәүгеһендә Кфимий Лукич ғәйепләне табып, яуапҡа тарттырырға йүнәлә: “*Унан да былай Ефимий Лукичтың ҡолҡо быға ҡаршы төшә. Миҙалдар тағып, ул бит гәйеп ярлыҡатырға бармай, гәйепләне фашларға, гәҙеллекте яҡларға бара. Миҙалһыҙ ҙа төшөндөрөр”* [1, 75], “*Ул - ҡаза күргән кеше. Ғәҙеллек уның ягында. Тик ошо гәҙеллек үкенескә булмаһа ярар ине. Сөнки ҡайһы ваҡыт кескәй хәҡиҡәт хаҡына ныҡышыу оло фажигәләргә килтерә”* [1, 76].

*- Мин цивильный Буренкин. Ефимий Лукич. Бойормайым. Һорайым.*

*- Һорамағыҙ.*

*Хәрби гәскәр бында кеше малына зыян килтерһә, ул зыянды кем ҡапларға тейеш?* [1, 79], *“Кәзә аяҡты йыҡты. Етемдәрҙең ризығы өҙөлдө...”* [1, 79], *“Ҡош бит кәрәкмәгәнгә оя ҡормаған. Яуапҡа тарттыр, командир. Язаһын бир. Зыянды түләт”* [1, 79], *“Миңә ни иҫәп-хисап кәрәкмәй, һауын кәзә кәрәк. Балалар асыға”* [1, 80].

Икенсе осраҡта Ефимий Лукич уның был хөкөмдөң сәбәпсе булыуына үкенә, сөнки йәш егеттең башын әрәм итергә ваҡиғалар ҡуйыра башлай. Бында “олатай” концепты икенсе боролош ала. Ул “намыҫ”, “рәнйеш” лексемалары менән бәйләнә. Миҫалдар: *“Ефимий Лукич эштең насар яҡҡа боролоуын бая уҡ һиҙҙергәйне. Уның күңеленә үкенес ҡағылып китте. Бәлә булмағайы...”*[1, 87], “*Килеп туҡтаған машинаға Ефимий Лукич был юлы ҡаршы сыҡманы. Ул борссоулы уйҙарға батҡайны. Күңеле ниндәйҙер фажигә һиҙә булыр, югиһә йөрәге килке-килке ҡыҫылмаҫ ине”* [1, 89], “*Тороп тор әле аҙыраҡ, - тине Ефимий Лукич тыныс ҡына. – Һин бит, улым, мине нахаҡҡа рәнйеттең. Хәҙер миндә кәзә ҡайғыһы ла, ярма ҡайғыһы ла юҡ”* [1, 90], “*Кеше ҡайғыһы, - тип яуапланы теге шул уҡ тыныс, моңһоу тауыш менән, - теге егетте... танкисты нимә эшләтәсәктәр?”* [1, 90], “*Начальник бер-бер һүҙ өндәшмәҫме тип, ике етемен етәкләгән*

*көйө тип тора Ефимий Лукич. Тегеһе лә һүҙ катмай. Үҙ уйҙарына сумған. Карттың сабырлығы бөттө: - Бына тағы килдем. Килдек... быныһы – ейәнем Васютка. –малайҙы ул етәкләп алға сығарып, кире урынына баҫтырҙы. – быныһы – ейәнсәрем Маринка. – Кыҙҙы урынынан куҙғатманы"* [1, 93].

Лукич фронтка икенсе килеүендә ғәйеплене аклау максаты менән командир менән конфликтка инә. Ул егетте ғәфү итә, әммә йәмғиәт был егетте ярлы к ай алмай, приказ барлығы менән сикләнәләр. Күңелендә түҙемлеге калмаған Лукич командирға балалар хакы менән өндәшә. Унның өсөн иң кәҙерле булған балалар һүҙе лә командир өсөн ҙур йоғонто яһамай: "*Ефимий Лукич тауышын күтәрә төштө. – Мәрхәмәт кәрәк! Ярлыкау кәрәк! Хата – енәйәт түгел! Йолоу кәрәк! Әжәл сәбәпсеһе итмәгеҙ мине, хоҙай хакы өсөн! Ярлыкау кәрәк! Мин бит унның ғәйебен юйҙым. Һеҙ ҙә юйығыҙ!"*[1, 93], "*Әллә ул йән әрнеүҙ әре, выждан ғазаптары аша асылына кайттымы шулай? Ефимий Лукич тағы ялбырырға кереште: - Бер емерек аласык менән емтек кәзә өсөө харап итмә еләк кеүек йәш кенә баланы! Иҫән булһа, ул бит таш һарайҙар һалыр, көтөү-көтөү малдар үрсетер. Якла уны, командир! – ике баланы етәкләгән көйө карт лып итеп ергә теҙләнде. – бынау гонаһһыҙ сабый йәндәр хакына үтенәм. Уттарға һалма беҙҙе! – әллә "утка һалыуҙан" куркып, әллә олатайн кыҙғанып, Маринка илап ебәрҙе. Кыскырып, сыйнап түгел, ниндәйҙер әҙәп-тыйнак менән иланы ул бала. Тыйыусы булмаһа ла, ул тиҙ туктаны. Васютка олатаһының кулынан тартты, теге яңынан аяк үрә баҫты"* [1, 94], "*Булмаҫ. Егерме йәшлек егет ил алдында хыянат кылмаҫ. Кайҙан килһен ти уға шундай яуызлык? Күҙ алдыбыҙҙа үҫте бит улар"* [1, 95], " - *Улайһа, бәләкәс кенә һуңғы үтенесемде үтә: күрһәт миңә ул егетте, алдына баҫып, бәхиллеген һорайым"*[1, 95], *"Улар, урман ауыҙ ын үтеп, оло юлға төштө. Уртала бөкрәйә төшкән Ефимий Лукич бара, ике яктан, ике ак сәскә төҫлө, ике ак баш йым-йым итеп күренеп кала. Карт атлай, тегеләре лүрт-лүрт йүгерә. Асығыуҙы ла, талсығыуҙы ла онотто улар. Сөнки олаталары илай. Үҙе атлай, үҙе быуылып илай..."* [1, 96].

Мостай Кәримдең “Ярлыкау” повесындағы Ефимий Лукич образы “намыҫ”, “ғәҙеллек”, “үҙ һүҙендә тора белеүсе”, “ғәфү итеүсе”, “яклаусы” лексемалары менән асыҡ характерлана. Ул егет яҙмышын ҡыйратып, аҙаҡ уны һаҡларға тырыша. шундай ауырлыкта ла Лукич Зухтың ғәйебен ярлыкай, әммә йәмғиәт уға каршы сыға. Приказдың һуңлап ҡына штабка килеп етеүе – йәш һалдаттың ғүмерен өҙә. Бында “намыҫ” тигән төшөнсә “олатай” концептына яҡын тора. Ҡасандыр һуғышта ҡатнашҡан, карсығы һәм ҡыҙы вафат булғас, ике бәләкәй сабыйҙы үҫтергән Лукич образы “Ярлыкау” повесында мөһим сюжет һыҙығы булып тора. Әҫәрҙә тотҡан урыны ике төрлө ваҡиғаларҙы хаталар менән түгел, ә рухи ҡиммәттәр, йәғни “ғәҙеллек” менән баһаларға ярҙам итә. Уның өсөн приказдар, әллә ниндәй документтар мөһим түгел, ә күңел тыныслығы Лукичка ғына хас күркәм сифат.

### ӘҘӘБИӘТ ИСЕМЛЕГЕ


1. Кәрим Мостай. *Әҫәрҙәр.* Дүрт томда, 3-сө том. Пьесалар, повестар, хикәйәләр. – Өфө: Башкортостан китап нәшриәте, 1987. – 592 бит.

2. Ураксин З.Ғ., Суфьянова Н.Ф., Уразбаева З.Ғ., *Хәҙерге башкорт әҙәби теленең аңлатмалы һүҙлеге.* Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты.– Өфө, 2004. – 528 б.

3. Самситова Л.Х. *Культурные концепты в башкирской языковой картине мира*: Монография. Научн. ред. М.В. Зайнуллин. – Уфа: БГПУ, 2014. – 364 с.

4. Янмурзина Р.Р. *Башкирская языковая картина мира в трилогии Зайнаб Биишевой "К свету".* - Уфа, 2015. - 142 с.